*Мәхмүт ҺИБӘТ*

# «Ғаләм әйләнә, һәр көнө Уның бит — һинең өсөн...»

## *Атайымдың Шахты калаһынан, госпиталдән яҙған һуңғы хаты*

Шахты ҡалаһын азат иткәндә
Башҡорт аты сапты һонолоп.
«Башҡорт ғәскәре — өлгө бүтәнгә!» —
Шул хис осҡон сәсте, йылынып.

Ҡулымда бит ҡылыс — Күк ҡылысы,
Күл ҡамышы ҡалды йығылып.
Ҡамыш йығылһа ла, Ватан ҡалҡа,
Баш эйергә ниңә, һыуынып?

Ҡайнар ғәййәрлектер — Ватан һағы,
Күк ҡылысын тотҡан — еңелмәй!
Беҙ азатлыҡ булдыҡ бында таңғы,
Беҙҙе — атлыларҙы кем белмәй!

Дошман — салт та, мең мәкерле шарт та,
Ҡылысымды йәҙрә онтаны,
Йөҙмә-йөҙ был алыш барған саҡта,
Һәм һөжүмем минең туҡтаны.

Ауҙым күрәнлеккә. Атым сүккән,
Икебеҙ ҙә — ҡаты яралы...
Әжәл еңеүе был түгел икән,
Килеп етте... табип ярҙамы.

Госпиталдән яҙам мин хатымды,
Сығаралар инде иртәгә.
Башҡорт атлыһының даны яҡты,
Яуы бирмәй Көндө үртәргә.

*20.03.2012*

## *Салауаттың анты һәм Күк ҡылысы*

Емелдәгән серле Өлкәрҙәй,
Күк ҡылысы ҡалҡты күгенә,
Салауаты киткәс донъянан, —
Тота уны ажар Ил генә!

Тота уны ажар ир генә, —
Тураҡларға ҡоллоҡ хаслығын!
Шуны бына тоя алғас, Ул —
Күк ҡылысы борҙо аҡ юлын.

Ер иңенә йәнә, Ант булып
Урал үрендә бер ялтланы.
Күк ҡылысын аймап тотто ир, —
Ул үҙ итте сая Атлыны.

Ҡоллоғонан Ватан ҡотолдо!..
Тик донъябыҙ ҡабат онталды,
Емелдәгән серле Өлкәрҙәй,
Күк ҡылысы ҡайҙа уҡталды?

Ниндәй ғаләменә ул күсте,
Ташландымы тамам Уралы?
«Ғәййәр Урал ҡыйҙы мең үсте,
Күк ҡылысы — уның ҡоралы!»

Өлкәр, тоям, мине ишетер,
Күк ҡылысын һуңғы көс итер,
Салауаттың тиңһеҙ антылай,
Ватан һаҡлап ауған Атамдай.

*26.03.2012*

* * *

Дәүерҙең үҙен тышайһың,
Иркенән көлә-көлә.
Мәлеңдең йәнен ашайһың,
Ер көнөн күмә-күмә.

Ер көнөнөң иң һуңғыһы —
Ваҡыты бөткән донъя,
Донъябыҙҙың ул туңлығы,
Тығылыу тынһыҙ ҡынға.

Шуны ла һин аңламаҫлыҡ
Сик етмәгән бит, кешем.
Ғаләм әйләнә, һәр көнө
Уның бит — һинең өсөн.

*30.04.2011*

* * *

Ил иләүе эсендә
Йәшәнем. Намыҫ йөгө
Булды һәр саҡ иңемдә,
Унан да ни бар изге?
Илде иләү итештем,
Ҡүгем — үлмәҫ йәшенле.
Йәшенле күк уты һеңгән
Тупраҡ ҡына — йәш көнлө.

*30.06.2011*

## Һүҙ моңо

Ҡистәрем үрендә
Шәфәктең һулыуы —
Ғазаптың булыуы.
Хистәрем күгендә
Һүҙгә моң ҡуныуы —
Шиғырҙың тыуыуы.
Шиғырҙың тыуыуы —
Ул — мәлдең, ул — мәлдең
Үлемһеҙ булыуы.
Бәҫ йәме — үремдә,
Хәстәрем — түрендә,
Хас кәре — гүрендә,
Шиғырым көсө был,
Һүҙ моңо түгел ҡол.

*10.12.2011*

* * *

Йылдарым — яза ғазабы,
Юҡмы уның аҙағы?
Шулай инрәп төбәлгәнмен
Тын шәүләңә Айҙағы.
Язасыны мин һөйәмме
Ғүмерем буйы түҙеп?
Ҡуптарылған мин һөйәнме,
Тамырынан уҡ өҙөп?

Ғазабымдың сере бит — һин,
Тамуғымдың төбө лә,
Йәмем үренә һин бикһең,
Тере көйө күмеләм.
Тамуҡ өҫтөн Ай биҙәмәҫ,
Төшөрәм уны онтап! —
Ожмах төҙөрбөҙ һин килгәс,
Йәшәмәм бүтән һыҡтап.

*24.01.2012*

* * *

Атайымдың ике ғүмерен
Йәшәргә яҙған миңә.
Беләм: ваҡыт — бик өлгөрөм,
Сослоғоң ғына еңә.
Хистәрең генә — терәгең,
Ғүмер башҡаса — буш сер.
Атайымдың ике ғүмере —
Ғүмерем. Йән ул — хис-үр.

*25.01.2012*

* * *

Ҡотҡарыусы йән асылым — һөйөү хисе,
Сауаплымын: йәшәй алдым ғашиҡ ише.
Тик көнөмдө йотоп, тамуҡ-ут итеүсе —
Йәм-ожмахта, илдән оломо һуң көсө?

*5.02.2012*

* * *

Ҙур, киң илдә йән тарлығы ҡырҙы йәмде,
Нисек һаҡлап ҡалайым мин ғаләмемде?
Тар хисленең булмай иле, ғаләме лә,
Ҡанға мансылған уның хәнйәр-сәләме лә.

*10.02.2012*

* * *

Һыңар табан менән баҫып торорлоҡ ере лә юҡ,
Етегәнде етмешкә сәсрәтерлек — күге, мәл юҡ.
Уның ҡулында тере ҡала алыр, көн яралыр, —
Булма шуға ул ғибрәткә бер яҙаһыҙ йәл уҡ.

*15.02.2012*



## *Инсур Йәһүҙиндың миңә өндәшкәне*



Баҙал өҫтөнән бер осоп
Үтәйем, тине, йәнем.
Күрермен, тине, һағынған
Күл урамының йәмен.

Ул йәм — беҙҙең шишмәбеҙ ҙә
Йәшәү илһамы ине.
Йәшәүебеҙ, Баҙал һымаҡ,
Ҙур моң донъяһы ине.

Йәшәүебеҙ ҡаяларҙа
Тыуған таң нуры ине.
Хисебеҙҙе ғаләм иткән —
Сихри һүҙ ҡуры ине.

Шундай ҙурлыҡ ғаләмен дә
Ҡалдырып бит киткәнбеҙ.
Хәйер, донъя кемдән ҡалмай,
Ергә, сергә күскәнбеҙ.

Һеҙҙе лә күк бейегендә
Ихлас көнөгөҙ көтһөн,
Төндә, йондоҙ бейегендә,
Ғашиҡ хисегеҙ өтһөн.

Ғашиҡ хисе биҙәй генә,
Йәшәмәнек көс менән.
Шишмәм миңә моңон һона,
Бөркөт нур һона үрҙән.

*28.04.2011*